

***Иҫәнғолов Фәрит Әхмәҙулла улы, Фәрит Иҫәнғолов— шағир, яҙыусы. (1928-1984)***

Фәрит Әхмәҙулла улы Исәнғолов 1928 йылдың 6 мартында Башҡортостандың Ҡырмыҫҡалы районы Ҡарлыманбаш ауылында тыуа.

1935—1945 **йылдарҙа** урта мәктәптә, 1945—1949 йылдарҙа Башҡорт дәүләт педагогия институтында уҡый. Ике йыл Ҡырмыҫҡалы районының Бишауыл-Уңғар урта мәктәбендә уҡытыусы һәм завуч булып эшләгәс, Башҡортостан [[[«Китап» нәшриәте]]нә күсерелә һәм мөхәррир, 1957 йылға тиклем өлкән мөхәррир булып эшләй. 1958—1960 йылдарҙа Мәскәүҙә Юғары әҙәби курстарҙа уҡый.

- 1965 йылға тиклем «Ағиҙел» журналының баш мөхәррир урынбаҫары, Башҡортостан Яҙыусылар союзының әҙәби консультанты була.

Фәрит Иҫәнғоловтоң тәүге шиғырҙары урта мәктәптә уҡыған мәлдә үк «Йәш төҙөүсе» газетаһында баҫыла башлай. Ләкин ул башҡорт әҙәбиәтендә прозаик булы



Фәрит Иҫәнғолов — балалар әҙәбиәтененең иң күренекле әҙибе. 1950 йылда «Ҡотлоәхмәт ҡарт» тигән тәүге хикәйәһе баҫыла. Бер-бер артлы «Тәүге һынау», «Баҫҡыс», «Хәмит күпере», «Сабирҙың дуҫтары», «Нәҙекәйбил», «Быйыл йәй» һәм башҡа хикәйә, повестары донъя күрә.



1970 йылда «Арыш башағы» романы өсөн Фәрит Иҫәнғоловҡа республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге премияһы бирелә.